Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы

Бала үҫтереү үҙәге -“Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы

# Балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереүҙә уйындарҙың әһәмиәте

Әҙерләне укытыусы-логопед
Йылҡыбаева Г.Р.

Сибай

**Балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереүҙә уйындарҙың әһәмиәте**

Фонематик ишетеү һәләте- ул туған телдең фонемаларын (телмәр өндәрен) ишетеп айыра белеү. Фонематик ишетеү һәләте бала тыуғандан һуң ололар менән аралашыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә, ә уның нигеҙендә инде фонематик төшөнөү үҙләштерелә. Бала һүҙҙәрҙе аңлап, үҙе һөйләшә башлаһа ла, унда фонематик төшөнөү булмаҫҡа мөмкин.

Баланы иртә йәштән тауыштарҙы, өндәрҙе тыңларға күнектереп, беҙ өндәрҙе дөрөҫ әйттерергә әҙерләйбеҙ һәм мәктәптә грамоталы уҡыу, яҙыуҙың тәүге күнекмәләрен формалаштырабыҙ.

Фонематик ҡабул итеү һәләте- ул телмәрҙәге өндәрҙе айырыу һәм һүҙҙең өн составын билдәләү һәләте. Фонематик ҡабул итеү һәләте үҫешкән тип әйтәбеҙ, әгәр бала өндәрҙе асыҡ дөрөҫ әйтһә, һүҙҙәрҙә ижек структураһы һәм телдең грамматик төҙөлөшө боҙолмаһа, сөнки ул телдең ҡатмарлы системаһының нигеҙе булып тора.Өндәрҙе әйтеү һөйләшеүҙе ишетеү менән ныҡ бәйле. Бының өсөн балаларҙа яҡшы дикция булдырыу мөһим, йәиһә артикуляция аппаратының хәрәкәтсәнлеген үҫтереү кәрәк.

Өс йәше тулып уҙған баланың был һәләтен тикшереү ауыр түгел. Мәҫәлән: ижектәрҙе минең арттан ҡабатла: СА-ЗА, БА-ПА,ВА-ФА.

Һүрәттән күрһәт: ағай-апай, даға-дуға, көн-төн, ҡар-шар...

Был һүҙҙәр берәр өн менән генә айырыла, әгәр бала дөрөҫ яуап бирһә, ул өн ишетеүгә һәләтле, тигән һүҙ. Һүҙҙә ижектәрҙең эҙмә- эҙлекле бирелешен контролдә тота торған һәләтте- һүҙҙе ишетеү һәләте тибеҙ.

Һүҙ ишетеү һәләте- ул һүҙ дөрөҫ әйтелдеме, юҡмы икәнде гел тикшереп, һаҡта тороусы "ҡарауылсы". Ғәҙәттә, бала яңы ишеткән һүҙҙе бер нисә тапҡыр ҡабатлай һәм дөрөҫ әйтмәүен һиҙенгән мәлдә, һүҙен ҡабатлай, йәиһә икеләнә: ама, амма, аума-алма, йәиһә- тумута, тумурта- тумыртҡа. Балала ошо күренештәр күҙәтелә икән, тимәк, уның телмәре дөрөҫ үҫешә.

Уйын балаларҙы аҡыл, әхлаки, физик, эстетик яҡтан тәрбиәләүҙә ҙур мәғәнәгә эйә булып тора. А.С. Макаренко уйынға ҙур әһәмиәт биргән һәм шулай тигән: "Балала уйынға ҡарата көслө ынтылыш бар, һәм уны ҡәнәғәтләндерергә кәрәк. Уйнарға ваҡыт ҡына биреү түгел, мәгәр ошо уйын менән уның бөтә тормошон тулыландырырға кәрәк. Уның бөтә тормошо- ошо уйын".

Уйын баланың һаулығына ыңғай йоғонто яһай. Уйын бер ваҡытта ла балаға ул үтәй алмаҫлыҡ талаптар ҡуймай, шулай ҙа бер аҙ көсөргәнешлелек талап итә. Баланың уйын эшмәкәрлеге психик процестарҙың, шәхси һыҙаттарҙың, интеллекттың үҫешенә булышлыҡ итә. Бала уйнай һәм үҫешә. Балаларҙың

ишетеү иғтибарын, фонематик ишетеү һәләтен, фонематик ҡабул итеүен үҫтереү өсөн ниндәй уйындар ҡулланырға була икән?

**1 этап. Телмәрҙә булмаған өндәрҙе ишетеү һәләтен үҫтереү**

Ишетеү иғтибарын үҫтереү өсөн уйындар.

“Һаҡ ҡолаҡтар” уйыны.

Маҡсат: ишетеү иғтибарын үҫтереү.

Педагог ағас һәм тимер ҡалаҡтарҙы, быяла стакандарҙы, бубен, ҡыңғырау, шылтырауыҡ күрһәтә. Атамаларын әйтәләр.Педагог был предметтар нисек яңғырағандарын тыңларға тәкдим итә. Ширма артына ҡуйып, яңынан тимер, ағас, быяла предметтар, бубен,ҡыңғырау, шылтырауыҡ сығарған тауышты тыңлайҙар һәм предметты, уның сығарған тауышын айырып әйтәләр.

“Ҡайҙа шалтырай?” уйыны.

Маҡсат: ишетеү иғтибарын һәм арауыҡта йомоҡ күҙҙәр менән йүнәлеште айырыу һәләтен үҫтереү.

Балалар күҙҙәрен йомоп торалар. Педагог ҡыңғырау тотоп шым ғына төркөм бүлмәһе буйлап бара ла, шалтырата. Балалар күҙҙәрен асмайынса, ҡулдары менән ҡыңғырау ҡайһы йүнәлештә шалтырағанын күрһәтәләр.

“Әйт, мин нимәлә уйнайым?” уйыны.

Бәләкәй ширма артында музыкаль уйынсыҡтар ята. Тәүҙә педагог һәр уйынсыҡ менән таныштыра. Һуңынан музыкаль уйынсыҡтың тауышын тыңлата һәм һорай: “Мин нимәлә уйнаным?”. Бала дөрөҫ яуап бирһә, фишка бирә.

“Кем мыяу тип әйтте?” уйыны.

Маҡсат: йорт хайуандарының тауышын ишетеп айырырға күнектереү.

Йорт хайуандарының яҙҙырылған тауыштарын тыңлау һәм дөрөҫ атау.

“Әйт, кем килә” уйыны.

Балаларға йәнлектәр төшөрөлгән һүрәт күрһәтеү.”Был айыу. Ул яй ғына, ауыр атлап килә. Бына ошолай, бубендың тауышы һымаҡ”. Педагог яй ғына бубенға туҡылдата, балалар айыу һымаҡ атлап күрһәтәләр. Шулай итеп ҡуянды, турғайҙы, төлкөнө һәм башҡаларҙы күрһәтергә була.

“Светофор эргәһендә нимә тора?” уйыны.

Маҡсат: ишетеү иғтибарын үҫтереү, транспорт төрҙәре тауыштарын таныу һәм атау. Педагог урам тауыштары яҙҙырылған яҙманы тыңлата һәм ниндәй транспорт светофор эргәһендә туҡтаны, тип һорай. Мотоцикл, еңел машина, йөк машинаһы, трактор, трамвай...тип яуап бирәләр.

“Тынлыҡты тыңлайыҡ” уйыны.

Маҡсат:ишетеү иғтибарын үҫтереү.

Педагог балаларға күҙҙәрҙе йоморға һәм иғтибар менән тынлыҡты тыңларға

тәҡдим итә. Балалар күҙҙәрен асҡас, кем нимә ишеткәнен тулы һөйләм менән яуап бирәләр.
–Ҡоштар тауышы, ишек ябылды, музыка тауышы, машина сигналы, балалар тауышы, ямғыр тыпылдауы, апайҙар тауышын һ.б.
Был уйынды бөтә төркөм балаларын саф һауала уйнатырға мөмкин. Бирелгән уйындарҙа бала тауыштың йүнәлешен ишетергә һәм дөрөҫ әйтергә өйрәнә, хәрәкәт координацияһы, фразалы телмәре үҫешә, һүҙлеге байый.

**2 этап.Телмәрҙе ишетеүҙе үҫтереү.**

Телмәр ишетеүҙе үҫтереү уйындары.
“Әйт, кемдең тауышы” уйыны.
Маҡсат: иптәште тауышынан таныу.
Балалар түңәрәктә торалар. Һанашмаҡ менән бер баланы уртаға ҡуялар. Ул күҙен йомоп тора. Педагог исемен әйтмәйенсә, ҡулы менән түңәрәктәге бер балаға күрһәтә. Ул уртала күҙен йомоп торған баланың исемен асыҡ, дөрөҫ итеп әйтә, ә бала иптәшенең исемен тауышынан танып әйтә.
“Әйт, кемдең тауышы”, “Лото”, “Кем оса (йүгерә, атлай, һикерә)” , “Һүҙҙәрҙе хәтерлә, ҡабатла” уйындарының төп маҡсаты булып тауышты айырыу, һүрәт менән һүҙҙе тап килтереү тора.
“Парын тап” уйыны.
Маҡсат: яңғырашы оҡшаш булған һүҙҙәрҙе табыу.
Баланың алдында бер нисә һүрәт ята. Ул яңғырашы оҡшаш булған һүҙҙәрҙең парын табырға тейеш. Мәҫәлән: дағa-дуға, ҡалаҡ-ҡолаҡ, бал-зал, парта-карта, боҙ-тоҙ, баш-таш, көҙ-күҙ.
“Өндәр доминоһы” уйыны.
Маҡсат: фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү.
Педагог балаларға һүҙ әйтә һәм һүҙҙең аҙағындағы өндө билдәләргә тәҡдим итә. Дөрөҫ яуап алғандан һуң, педагог шул өнгә һүҙ уйларға тәҡдим итә. Мәҫәлән: АТ-ТУП-ПИЖАМА-АЛМА-АҒАС-САНА-АЛЬБОМ...
Өндәрҙе дөрөҫ ишетеп айырыу өсөн өноҡшаш уйындар ҡулланырға кәрәк. Ә өндәрҙе дөрөҫ әйтергә күнектереү һуҙынҡы өндәрҙән- А, О, У, Ә, Ө, Ү, И һәм ябай артикуляциялы тартынҡыларҙан башлана -Б, П, В, Д, Т, К...
Мәҫәлән:
Бала илай-А-А-А-А. Урманда аҙашҡанда-АУ-АУ-АУ, тип ҡысҡырабыҙ. Ауыртҡанда- ОЙ-ОЙ-ОЙ, тип әйтәләр.
”Өс айыу“ әкиәтендә ҙур айыу-У-У-У- көслө ҡалын тауыш менән, ә бәләкәй айыу балаһыҮ-Ү-Ү- нәҙек тауыш менән ауаз сығара.
“Сәйнүк ҡайнай”-П-П-П, “Терпе”-Ф-Ф-Ф. “Насос”-С-С-С. “Көслө ел”-В-В-В. “Самолет”-Л-Л-Л. “Пароход”-Б-Б-Б.

**3 этап. Өн анализы һәм синтезы күнекмәһен үҫтереү.**

Фонематик ишетеүҙе үҫтереүсе уйындар: "Ҡыҙыл- аҡ", "Өн ҡайҙа?", "Кем иғтибарлы?", "Кем күберәк һүҙ уйлай?", "Һүҙҙе туҡылдат", "Телеграф"...
Был уйындарҙа балалар бирелгән өндө ишетергә, һүҙҙә табырға өйрәнәләр, һүҙҙе ижектәргә бүләләр, һүҙҙә өндөң урынын билдәләйҙәр, һүҙлекте активлаштыралар һәм өндәрҙе автоматлаштыралар.

Мәҫәлән: "Ҡыҙыл- аҡ" уйыны.

Маҡсат: бирелгән өндө һүҙҙә ишетеп табыу.

Һәр балаға икешәр түңәрәк бирелә- ҡыҙыл һәм аҡ төҫтә. Педагог балаларға иғтибар менән тыңларға һәм ҡайһы һүҙҙә бирелгән өндөң ишетелеүен билдәләргә тәҡдим итә. Бирелгән өн һүҙҙә ишетелһә, балалар ҡыҙыл түңәрәкте күтәрәләр, әгәр булмаһа- аҡ түңәрәкте күрһәтәләр.

Мәҫәлән: А өнө һәм һүҙҙәр бирелгән: бал, өй, ун, ҡар, ҡош, күл, шар, боҙ, ҡаҙ.

"Өндө тот" уйыны.

Маҡсат: фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү.

Педагог өндәр рәтен әйтә, балалар бирелгән өндө ишетһәләр, сәпәкәй итәләр.

Мәҫәлән: У өнө бирелгән, У өнөн өндәр араһынан ишетеп тоторға кәрәк.

У, О, И, Ү, У, А, В, У,Ө.

Шулай уҡ ижектәр рәте менән эшләргә була: АУ, ОА, ОУ, ОИ, УА, ИО, УИ.

Аҙаҡтан һүҙҙәрҙә У өнөн ишетеү: УТ, ОЯ, УҠ, ӨЙ, УС, АС, ШУҠ, ТӨШ, КҮС, БУШ, ҠУШ...

"Өн ҡайҙа?" уйыны.

Маҡсат: һүҙҙә өндөң урынын табыу.

Төҫлө ҡағыҙ таҫма өс өлөшкә бүленгән һәм фишка бирелгән. Педагог һүҙ әйтә. Балалар һүҙҙә бирелгән өндөң урынын билдәләйҙәр: өн һүҙҙең башында ишетелә.Таҡта эргәһендә, йә һәр бала ултырып, йә өҫтәл артында эшләргә мөмкин.Тәүҙә балаларҙы һүҙҙең башындағы өндө ишетеп айырырға күнектерергә кәрәк, шунан һүҙҙең аҙағындағы өндө ишетеп айырырға күнектерергә кәрәк. Ошо күнегеүҙәрҙе үҙләштергәндән һуң ғына, бирелгән өн һүҙҙең уртаһында килгәнде алырға була.

Мәҫәлән: А өнө бирелә. Һүҙҙәр: АҠ, АТ. А өнө һүҙҙең башында ишетелә.

- ТОРНА, ГРУША, БУТҠА һүҙҙәрендә А өнө һүҙҙең аҙағында ишетелә.
- БАЛ, ЗАЛ, ТАЛ-һүҙҙәрендә А өнө һүҙҙең уртаһында ишетелә, тип балаларға аңлатырға кәрәк.

"Кем күберәк?" уйыны.

Маҡсат: һүрәттәге предметтарҙың атамаһында кәрәкле өндө табыу.

Педагог балаларға һүрәт күрһәтә һәм иғтибар менән ҡарарға тәҡдим итә. Һуңынан ҡайһы предметтарҙың атамаһында С өнө (Р өнө йә Ш өнө) бар, тип һорай. Кем күберәк табып әйтә, шул еңеүсе,тип иҫәпләнә.

“Кем иғтибарлы?” уйыны.
Маҡсат: өндәрҙе ишетеп айырыу, һүҙлекте активлаштырыу.
Педагог әйтә: ”Мин һеҙгә һүрәттәр күрһәтәм, атамаларын әйтәм, ә һеҙ иғтибар менән тыңлағыҙ. Мин әйткән барлыҡ һүҙҙәрҙә лә ниндәй өн ишетелә? Кем кәрәкле өндө ишетә, ҡулын күтәрә”. Педагог һүрәттәрҙе күрһәтә, атамаларын әйтә, һүҙҙәр С өнөнән башлана. Стакан, слива, сана, сумка... Балалар С өнөн ишетеп айыралар. Педагог: ”Дөрөҫ. Хәҙер һеҙ шул һүҙҙәрҙе ҡабатлап әйтегеҙ әле”. Балалар педагог әйткән һүҙҙәрҙе хәтерләп, ҡабатлайҙар. Һуңынан балалар үҙҙәре ошо өнгә һүҙҙәр уйлап әйтергә тейештәр.
“Үҙеңдең һүрәтеңә урын тап” уйыны.
Маҡсат: төрлө өндәрҙе ишетеп дифференциациялау, һүҙлекте байытыу.
Балалар өҫтәл артында ултыралар. Педагог шар төшөрөлгән һүрәтте күрһәтеп әйтә: ”Шарҙан һауа сыҡҡанда Ш-Ш-Ш тигән өн ишетелә. Мин был һүрәтте һул яҡҡа һалам. Был ҡуңыҙ. Ул Ж-Ж-Ж тигән өн сығара. Был һүрәтте уң яҡҡа һалам”. Педагог күнегеүҙе нисек үтәргә кәрәклеген күрһәтә һәм эргәһенә алмашлап балаларҙы саҡыра. Һәр бала үҙенең һүрәттәрен атай һәм кәрәкле урынға һала. Был уйынға һүрәт һайлағанда, өндәрҙең әйтелеше унын яҙылышына тап килергә тейеш. Ж өнө һүҙҙең аҙағында булғанды, йә һаңғырау тартынҡы алдынан килгән һүҙҙе алмаҫҡа кәрәк.
“Ижектәрҙе туҡылдат” уйыны.
Маҡсат: һүҙҙәге ижектәрҙе ишетеү һәм һүҙҙе ижеккә бүлеү.
Педагог һәр балаға һүҙ бирә һәм шул һүҙҙе туҡылдатып ижеккә бүлергә тәҡдим итә. Һүҙҙе асыҡ һәм ҡысҡырып әйтә, мәҫәлән: ЭТ. Бала сыға ла, был һүҙҙә нисә ижек бар, шуныңса туҡылдата-1. (ҡәләм, бубен, барабан ҡулланырға мөмкин). Ошо уйынға оҡшаған тағы бер уйын “Телеграф” тип атала. Балалар тәүҙә бер ижекле һүҙҙәрҙе бүлергә өйрәнәләр, һуңынан 2-3 ижекле һүҙҙәрҙе сәпәкәйләп бүлергә өйрәнәләр.
Мәҫәлән: ШАР, ПАР, ҠАР, ҠЫШ -ҡыҫҡа һүҙҙәр. Бер ижекле һүҙҙәр.
-НИ ӨСӨН ҡыҫҡа һүҙҙәр тип әйтәбеҙ, сөнки һүҙҙә бер генә һуҙынҡы бар, шуға ул бер ижекле һүҙ була.
Һүҙҙәр бирелә: АҒАС, ВАГОН, БАРАБАН, ТАҒАРАҠ, БУРАТИНО.
Балалар һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлгәс -НИ ӨСӨН оҙон һүҙҙәр? тип һорайбыҙ- Һүҙҙә бер нисә һуҙынҡы өн бар, шуға ла ижектәр күп, был оҙон һүҙ була, тип аңлатабыҙ.
Нисек дөрөҫ итеп ижеккә бүлергә өйрәтергә?
Һауа ағымы тыныс иркен ауыҙ аша сыға, бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡтар юҡ- былар һуҙынҡы өндәр: А, О, У, Ә, И, Ө, Ү, Э. Уларҙы һуҙып була, йырлап була. Һуҙынҡы өндәрҙе ҡыҙыл төҫ менән билдәләйбеҙ.

”Еп һуҙыу” уйынын уйнарға мөмкин. Һуҙынҡы өндө әйткәндә, еп һуҙыла-А-А-А-А. Тартынҡы өндө әйткәндә еп өҙөлә:С.
Һуҙынҡыны әйткәндә ауыҙ асыла, бер һуҙынҡы өн- бер ижек . Мәҫәлән: ҡулды эйәк аҫтына ҡуйып әйтергә-АТ, 1 ижек. Ҡулды эйәк аҫтына ҡуйып һүҙҙе ижеккә бүлеү-АЛМА- 2 ижек.
Барабан- 3 ижек, Буратино- 4 ижек...
Тартынҡы өндәрҙе йырлар инек, әммә ауыҙ ҡыуышлығында ҡаршылыҡтар күп: һыҙғырыу, шышылдау, ырылдау, жыуылдау.Ҡаршылыҡтар булғанға өн тиҙ әйтелә, былар тартынҡы өндәр.Тартынҡы өндәрҙе күк төҫ менән билдәләйбеҙ.
Уйын”Дөрөҫ ижеккә бүл “.
Педагог тәүҙә бер ижекле һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп, төрлө ысул менән бүлергә күнектерә. Мәҫәлән: ҠЫШ, ТАШ, ШАР, ҠАР, МӘК, ЭТ һүҙҙәрен туҡылдатып, сәпәкәйләп, атлап, бармаҡ менән, фишкалар менән билдәләп бүлергә мөмкин. Һуңынан ике-өс ижекле һүҙҙәрҙе ошо ысулдар менән бүлергә өйрәтергә кәрәк.
Өн анализы һәм синтезы күнекмәләрен үтәгәндә түбәндәге уйындарҙы тәҡдим итер инем.”Өн ҡайҙа йәшенгән?”, “Өндөң урынын билдәлә”, “Өндө дөрөҫ тап”, ”Һүҙҙең башындағы өндө әйт”, “Һүҙҙең аҙағында өндө айырып әйт”, ”Өндө тот”, ”Ниндәй өн йышыраҡ ишетелә?”,”Төҫлө фишкалар”-өн, тартынҡы, һуҙынҡы, яңғырау, һаңғырау, ҡаты, йомшаҡ тартынҡы төшөнсәләре менән таныштырыу. “Оҡшаш һүҙҙәр һайла”,”Һүҙҙе кире ҡайтар”-педагог шыбырлап ҡына балаға һүҙ әйтә, бала ла шыбырлап ҡына шул һүҙҙе кире әйтергә тейеш. ”Һүҙ төҙө”- өндәр бирелә, бала һүҙ төҙөп әйтергә тейеш: У, Т-УТ, Б, А, Л- БАЛ.. “Һүҙҙе әйт”-Ҡ, О, Ш-ҠОШ, Т,У, П-ТУП, С, Ы, Р-СЫР...
(ШАР, ҠЫШ, ШКАФ. С,Ы,Р-СЫР, Ҡ,Ы,Ш- ҠЫШ, Б,А,Л-БАЛ...)
Я, Ю, Й, Е өндәре-йотлаштырылған өндәр, ике өн ишетелә, балаларға әйтеп аңлатып үтергә кәрәк.
Шулай итеп был уйындарҙа балаларҙың фонематик ишетеү һәләте үҫешә. Балалар бирелгән өндө һүҙҙә табырға өйрәнәләр, һүҙҙе ижектәргә бүләләр, һүҙҙә өндөң урынын билдәләйҙәр, һүҙлекте байыталар, өндәрҙе нығыталар.Бирелгән уйындарҙы, күнегеүҙәрҙе бала үҙләштерһә, мәктәптә был балаға уҡыуы еңел буласаҡ.